Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге – “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы

Ата-әсәләр өсөн консультация:

# “Кескәй төркөмдәрҙә балаларҙың сенсорик һәләтен үҫтереү юлдары”

**Тәрбиәсе:**
**Кунсбаева Л.Х.**

**Сибай-2021**

Тирә-яҡты өйрәнеү  һиҙеү һәм ҡабул итеүҙән башлана. Был тойғолар ни тиклем байыраҡ булһа, бала тарафынан алынған белем дә шул тиклем тулыраҡ, аңлайышлыраҡ була бара. Баланы аҡыл, физик, эстетик, экологик йәһәттән тәрбиәләү  күп осраҡта уның ни тиклем тирә-яҡты һәйбәт ишетеүе, күреүе, тойоуына бәйле. Тормошто хис-тойғолар аша ҡабул итеү–баланың тирә-яҡты өйрәнеүҙәге иң мөһим өлөшө һәм уның интеллектуаль үҫешенә этәргес булып тора.

Тирә-йүнде ҡабул итеүгә йүнәлтелгән система сенсорика тип атала, ә тирә-йүнде ҡабул итеүҙе тулыһынса формалаштырыуға сенсор тәрбиә булышлыҡ итә. Уның төп маҡсаты – балаға предметтың төҫө, күләме, формаһы тураһындағы төшөнсәне биреү.

Баланың үҙен уратып алған тормошто өйрәнеүе, ҡабул итеүе өлкән кешенекенән ҡырҡа айырыла. Өлкәндәр тормошто  аҡыл менән ҡабул итһә, кескәйҙәр тирә-яҡты эмоциялар ярҙамында өйрәнә. Кескәй балаларҙың өйрәнеү әүҙемлеге, тәү сиратта, уның тормошто ҡабул итеүенә, фекерләүҙең символик функцияһына һәм эштәрҙе уйлап эшләүенә бәйләнгән.

Кесе йәштәге балаларҙа һиҙеү органдарының үҫеше бик интенсив рәүештә бара, уларҙың бөтә яҡлап үҫешен сенсор үҫеш тәшкил итә. Балала аҡыл, физик, эстетик тәрбиәнең алға китеше иң беренсе сиратта баланың ни дәрәжәлә күрә, ишетә һәм һиҙә белеүенә, йәғни сенсорик тәрбиәнең үҫешенә бәйле. Көндәлек тормошта бала яратҡан уйынсыҡтары һәм төрлө предметтар аша төҫтәр менән таныша. Шул уҡ ваҡытта төрлө картина, һүрәттәр күрә, музыка ишетә, ләкин был белемдәрҙе ҡабул итеү, үҙләштереү ололар ярҙамынан башҡа булһа, уның тәьҫире әҙ була. Бына шул ваҡытта сенсор тәрбиә ярҙамға килә лә инде.

Бөтә яҡлап тулы тәрбиә биреү осоронда сенсорик тәрбиә донъяны танып белеү, тойоу, һиҙеү тәжрибәһе булып тора. Ыңғай эстетик, уй-фекерләү, физик тәрбиә биреү ҙә сенсорик тәрбиә биреүҙең бер баҫҡысы булып тора. Һәр үҫеш осоронда баланың һиҙеүе, тойоуы ла төрлөсә була.

Сенсорик тәрбиә биреү түбәндәге принциптарға таянып үтәлә:

1. Сенсорик тәрбиә биреүҙең тамыры булып иң кескәйҙәр төркөмөнән башлап баланың арауыҡтағы, уратып алған предметтарҙың төҫтәрен, формаларын, ҙурлығын билдәләү, музыкаль һәләттәрен, ҡул суҡтарының моторикаһын үҫтереү тора.
2. Сенсорик тәрбиәне бүтән төр эшмәкәрлектәр менән бәйләү, педагогтың эшен төплө, конкретлаштырып күрһәтергә ярҙам итәсәк. Бала предметтың сифатын, төҙөлөшөн генә өйрәтеп ҡалмай, ә уның тормоштағы роле менән таныша.
3. Арауыҡта эш итә белеү менән бәйле белемдәрен дөйөмләштереү. Һәр предметты яҡшы белмәй тороп уның сифатын һәм төҙөлөшөн белеп булмауын аңлатыу.
4. Предметтарҙың төҙөлөшө һәм сифаты тураһындағы белемдәрен, күҙаллауҙарын системаға һалыу. Ниндәй генә предметты өйрәнһәләр ҙә уның тураһындағы белемдәрен һәм тәжрибәләрен ҡулланыу. Бала бик бәләкәй ваҡытынан яңы предмет менән танышҡанда үҙенең белгәндәрен ҡуллана башлай.

Сенсорик тәрбиәнең әһәмиәте шунда:
- интеллектуаль үҫештең нигеҙе булып тора;
- күҙәтеү һәләтен арттыра;
- ысын тормошҡа әҙерләй;
- эстетик һиҙемләүгә позитив тәьҫир итә;
- иғтибарлылыҡты арттыра;
- сенсор эталондарҙы үҙләштереүгә ярҙам итә;
- баланың һүҙлек байлығын арттыра;
- күреп, ишетеп, образлы иҫтә ҡалдырыу үҫешенә йоғонто яһай.

Кескәйҙәргә сенсорик тәрбиә биреү эштәрен төрлөсә алып барырға мөмкин:
- төркөмдә сенсорик мөйөш булдырыу;
- үҙләштереүҙең бөтә төрөн үҫтереү өсөн уйын-тәжрибәләр үткәреү;
- фронталь һәм төркөмдәргә бүленеп тәбиғи белем биреү эшмәкәрлеген ойоштороу;

- күңел асыуҙар үткәреү;
- балалар баҡсаһы территорияһында сенсорик маршрут төҙөү һ.б.

Сенсомоторика буйынса үткәрелгән тактиль һәм күреп таныуға йүнәлтелгән уйындар һәм күнекмәләр аша балаларҙың күҙәтеүе, иғтибары, хәтере, күҙаллауы үҫешә, күргән тәҫьораттарының эҙмә-эҙлелеге һаҡлана, һүҙ запасы байый.